***Марсель ҠОТЛОҒӘЛЛӘМОВ***



# а арманлы  юлы

Үҙенең бар игелеген, бөтә йомартлығын Аллаһы Тәғәлә ошо төбәк аша үткәндә күрһәткәндер, ахырыһы. Юғиһә, сикһеҙ далаларға, үҙәндәр ҡуйынына гәлсәр күлдәрен һибеп, түбәләрендә болоттар ҡунаҡлар тауҙарын теҙеп, өҫтәүенә, шул тауҙарға мәғдән тултырып, бәндәләренә мәңгелеккә мираҫ итеп ҡалдырмаҫ ине. Матур — матур түгел, һөйгән — матур, тиҙәрме әле? Ҡаялы, уҫал ҡарашлы ошо тауҙар, ҡайын менән ҡарағас ярышып үҫкән урмандар, әллә ҡайҙарға китеп, офоҡтоң зәңгәр томандарында юғалған далалар — былар, бәлки, мине генә шулай мөкиббән эҫендергәндер? Юғиһә, Әбйәлилемә аяҡ баҫыуым була, йөрәгем өҙгөләнә башлай: юйылып бөтмәгән хәтерем Ирәндек битләүҙәренә — ғүмер баҡый Олоташ менән Ҡоҙғонташ сусаҡтарының ус төбөндә йәшәп, хәҙер һүнеп ҡалған Ҡалмаҡ ауылына тарта. Ул — донъяға килгән урыным. Аҡылым Ҡырҡты менән Ирәндекте айырып, Оло Ҡыҙыл көнсығышҡа юл алған киң үҙәндә ятҡан Ҡаҙмашта туҡтарға ҡуша. Был ауыл мине үҫтергән, алдағы ғүмеремдә кем буласағымды төҫмөрләткән. Күңелем иһә Ташбулат, Айыуһаҙы, Күсем ауылдарында, Ҡарабалыҡты, Сабаҡты, Мауыҙҙы ярҙарында. Ошонда үҫкән бер ҡыҙ заманында бар булмышымды биләмәһә, тормошомдоң мәғәнәһе һәм йәме булыр инеме икән? Ысындан да, беҙҙең Әбйәлилдә күлдәрҙең исемен, ҡупшылап, Сабаҡлы, Ҡарабалыҡлы йә Суртанлы тип тормайҙар, ә үҙебеҙсә, ҡаты ялғау менән әйтәләр.

Күңелеңде биләгән нәмә бер юлы аңыңды ла томалайҙыр инде. Һин уның ыҙа-маҙаларын да күрмәйһең, эҫеһен-һыуығын да тоймайһың. Байтаҡ ғүмерем Ташбулат, Күсем яҡтарында үтә торғас, мин был тирә тәбиғәтенең ҡылансыҡ ҡыҙҙар холҡона ла шаһитмын. Йәйге иртәләрҙә күл өҫтөнән ҡояш ҡалҡыуы! Уның алтын мыйыҡтары тәүҙә Сейәлетау аръяғында ҡыймылдай башлай ҙа, аҙ ғына күтәрелгәс, күҙ алдында һибелеп ятҡан талир тәңкәләрҙе йымылдатып ебәрә. Тымыҡ, аяҙ таңдарҙа болоттар ҙа, өлтөк-өлтөк ағастар ҙа, яр тирәләй күлгә төңкәлгән ҡая таштар ҙа һыуҙа йөҙә һымаҡ. Әммә был ожмах төҫө

тәбиғәттең бер тын тартыуы менән генә боҙолоуы ихтимал. Ул тын, ҡапыл ғына өргән ел йә дауыл булып, күлдең сибәр йөҙөн сырыштыра, әллә ҡайҙан саң-ҡом өйөрмәһе килеп сыға ла, оҙаҡ туламай, тау ектәренә инеп юғала. Ауылын башлап, үҙ атын уға биргән Күсем бабай барыбер аҡыллы, аҙымын самалап баҫыр кеше булған икән. Ул ҡыуан елле далаға ла тартылмаған, бигүк урман-тауға ла инеп бикләнмәгән. Күсем ауылын көнбайыштан ҡеүәтле Ҡырҡты һырты ҡаплай, төньяҡтараҡ Көркәк армыты китә, ә көньяҡтан һәм көнсығыштан — әлеге Сейәлетау, Ҡотоҡай тауҙары. Боронғоларҙың һөйләүенсә, Ҡырҡтының үҙәк һыртындағы Күсем, Ҡушай сусаҡтарында йәйен-ҡышын ҡарауыл торған. Асманға бер саҡырымдан ашыуыраҡ күтәрелгәс ни, ул хәтлем юғарынан китә ятыр ҡунағы ла, ҡуштаны ла ҡурғаусыларҙы күҙ яҙҙыра алмаған. Күсем ауылы үҙе үк миңә тәбиғәт тарафынан да ҡурсаланған, батырҙарына ла арҡа терәгән оло быуыныбыҙҙың кәүҙәләнеше булып күренә.

Халҡыбыҙҙың арҙаҡлы батыры, генерал-майор Таһир Күсимовтың тормошон, йәшәгән ғүмеренең булмышын күҙ алдынан үткәргәндә, күңелдә әллә ниндәй сағыштырыуҙар ҡайнай, уны яу юлдарын, яҙмыш иләгән үткән һалдат итеп тә, үҙебеҙ ише үк ябай бер кеше рәүешендә лә күрге килә. Тайып улының тәржемәи хәле, хәрби хеҙмәт юлы төпсөрлө генә өйрәнелгән, уның тураһында яҙылған очерк һәм мәҡәләләрҙең иҫәбе-һаны юҡ. Яҡташыбыҙ, күренекле яҙыусы Рамаҙан Өмөтбаев ағай фекерҙәше, ҡорҙашы, өлкән дуҫы тураһында бик йөкмәткеле документаль повесть яҙҙы. Рәхмәт яуһын уға! Шул уҡ ваҡытта, ҡыуанып һәм ғорурланып, Күсимов феномены тураһында уйлайбыҙ. Аллаға шөкөр, башҡорт ере бер заманда ла батырҙарһыҙ йәшәмәгән. Ана, Бөйөк Ватан һуғышында төрлө милләттәге биш йөҙгә яҡын Башҡортостан кешеһе Советтар Союзы Геройы булды, шуның 230-ы ошонда тыуып үҫкән. Ошо ҡаһармандарҙың ҡырҡ бере — башҡорт. Тәбиғи, батырлыҡҡа иҫәп-хисап алып барыу тәрбиәлелек һаналмай. Теге йәки был төбәктә Алтын Йондоҙ таҡҡан егеттәр һәм ҡыҙҙар булғанмы, юҡмы, ул да сәм күпертеү эше түгел. Һуғыш

*Генерал Т.Т.Кусимов тыуған ерендә.*
*Унан һулда Ғ.Ғ.Ғилманов, уңда — Н.Ғ.Билалов*



тамуғын үтеп, хәсрәт даръяһында сәсәп ҡайтҡан йә ятып ҡалған батырҙар һис ҡасан да онотола алмай. Уларҙың һәр береһе ҡәҙерле. Әммә Таһир Ҡүсимов ағайҙың ошо батырҙар араһынан да күтәрелеп, мөһабәтлек бөркөп тороуы генералдың баһадир һыны менән генә аңлатылмай. Ысын мәғәнәһендә Милли батыр мәртәбәһенә өлгәшеү өсөн генерал булыу, хатта Алтын Йондоҙ тағыу ҙа етмәйҙер. Ҡүсимов образы менән башҡорттар үҙ милләтенең хыялы йөрөткән батыры ниндәй булырға тейешлеген күрһәтте.

Был яҙмаларҙың авторы — генерал-майор менән таныш булып, хатта аратирә хәбәрләшеп йәшәгән бәхетле кешеләрҙең береһе. Ләкин был ғына миңә иҫтәлек яҙыу кеүек яуаплы эшкә мәһарәтлек бирмәй, бәлки, Таһир ағайҙы күреү, уның һүҙен тыңлауға ҡағылышлы хәтер сәхифәләренә бер аҙға ҡайтарып ҡына ала. Генерал-майор Ҡүсимов, һуғыштан һуң Совет Армияһының төрлө ғәскәри часында, төрлө вазифала оҙаҡ хеҙмәт үткәргәс, уны дауам итеү өсөн тыуған республикаһына әйләнеп ҡайтты. Геройҙың республика хәрби комиссары итеп тәғәйенләнеүе үткән быуаттың алтмышынсы йылдар башында үҙе бер ваҡиға булғандыр инде. Әйткәндәй, хәҙерге һымаҡ, Өфө урамдарында хәрби һәм штатский генералдар ул саҡта аҙым һайын осрамай торғайны. Таһир ағайҙың урамда күренеүе, берәй сара-маҙарға барыуы — оло байрам. Генералды халыҡ шундуҡ уратып ала, эргәһендә сыр-сыу килеүсе кешеләргә Таһир ағай көләмһөрәп ҡарап тора, кәрәкһә, берәй төртмә һүҙе лә алыҫ йөрөмәй. Әйткәндәй, ҡайҙа һәм ниндәй генә шарттарҙа булмаһын, генерал етди мәсьәләләрҙе лә еңеллек менән хәл итеү әмәлен таба ала ине.

Таһир Тайып улының тормош юлын өйрәнеүселәр төп иғтибарҙы ғәҙәттә уның рәсми хеҙмәт эшмәкәрлегенә бирә. Был ғәҙелдер. Бөйөк Ватан һуғышынан алда йәш-елкенсәк хәрби хеҙмәткә айырыуса бер дәрт менән ынтылған бит. ОСОАВИАХИМ-дың эшмәкәрлеге, БГТО, ГТО нормативтарын тапшырыу, аэроклубтар, ворошиловсы мәргәндәр түңәрәктәре — инҡилап үткәреп, яңы дәүләт төҙөүсе халыҡ уны ҡорал менән яҡлау зарурлығын аңлап йәшәгән. Ул замандар халыҡтың армия менән ысындан да бер ғаилә кеүек ойошҡан сағы булған.

Хәрби кейемле кеше йәмғиәттә айырым урын биләгән, һәм хәҙер беҙ, хәрбиҙәрҙең ҡасандыр элита булыуын һағынып, инҡилаптан алдағы осорҙарҙы иҫкә алһаҡ та, ғәмәлдә был һуғыштан алда ла, унан һуң да шулай ине. Комсомолдарҙың хәрбиләштерелгән форма кейеп, яурын аша портупея үткәреп, фырт йөрөгәнен хәтерләйһегеҙме? Ниндәй матур, ғорур ҡиәфәттә ине ул егеттәр! Бына яҡташыбыҙ, оҙаҡ йылдар Ҡаҙағстандың Рудный ҡалаһында йәшәгән Ҡарағол Азаматов ағайҙың яҙмаларын нәшер итеүгә әҙерләгәндә, бер фоторәсем килеп сыҡты. Ергә етә яҙып торған шинелле, билде һыға быуып, портупеяға ҡылыс элгән ике егет. Һулдағыһы — Башҡортостандың Урал аръяғы башҡорттарынан буласаҡ тәүге хәрби осоусы Шәмиғол Азаматов, уңдағыһы — Таһир Ҡүсимов. Фотоға төшкән урын һәм ваҡыт — Ҡазандағы берләштерелгән татар-башҡорт хәрби мәктәбе. 1929 йыл. Шәмиғол Азаматов — өлкән сержант, Таһир Ҡүсимов — әлегә рядовой. Тәүгеһе — Әбйәлил районының Алсынбай ауылы егете, икенсеһе — Ҡүсемдән. Шәмиғолдоң ауылы Әүмеш күленә һыйынған, Таһирҙыҡы — Сабаҡтыға. Әйткәндәй, ТатЦИК исемендәге кавалерия мәктәбенән һуң яҡташ егеттәрҙең юлдары айырылған. Шәмиғол ағай, кавалерист булыуҙан баш тартып, Пермь авиация училищеһына инә, Таһир, әлеге мәктәпте тамамлағанда, партия сафына алынып, һыбайлы һөнәренән айырылмай, хеҙмәтен дауам итә. Яйы сыҡһа, осоусы Азаматов һәм уның ғаиләһенең яҙмышы тураһында һөйләшербеҙ әле.

Арыҫландай булыр арыҫлан, ай балаһы,
Юлбарыҫ булыр юлбарыҫ балаһы.

Тыуған илен һаҡлап, яуға китер
Яҡшы ғына ата балаһы.

Таһир Ҡүсимовтың һуғыш юлдары, ҡаһарманлыҡ тарихы яҡшы билдәле. Бөйөк Ватан һуғышынан аҙаҡ ике академияла белем алып, ярайһы ғына вазифаларҙа хеҙмәт итеп, данлыҡлы генерал, әйткәнебеҙсә, Башҡортостанына ҡайтып төшә.

Мин, 1944 йылда М.Фрунзе исемендәге хәрби академияға инеп, уның тыуған ауылына ҡайтып күренгән сағына ишара яһайым. Йәйҙең башланып ҡына торған мәленә тура килә ул. Яҡташтары геройҙы Ташбулат менән Ҡүсем араһындағы ҡалҡыуҙа ҡаршылай. Тыуған яҡтарына егерме йыл ҡайтып әйләнмәгән кешегә ауылы ла ят, халҡы ла ифрат йонсоған күренә. Ике туған ҡарындашы Фатима апайҙар өйөндә, ауыл халҡы барын йыйып, ашъяулыҡ һымаҡ нәмә йәйгәндәр. Ләкин, ауылдаштары уғата ихлас торһа ла, Ҡүсимов уларҙың бөлгөн хәленә сыҙап ултыра алмай. Магнитогорск металлургия комбинаты директоры Григорий Иванович Носов менән күрешергә сығып китә.

Был эпизод Рамаҙан Өмөтбаевтың китабында ентекләп, матур итеп һүрәтләнгән. Шуныһын ғына уҡыусы хәтеренә төшөрәйек: легендар директор батыр фронтовиктың ауылдаштары хаҡына үтенесен кире бормай, ул ауылға әйләнеп ҡайтҡансы уҡ Ҡүсемгә ҡаланан он килеп етә. Магнитка етәксеһе броня ҡоросон ҡайнатыуҙа марганец мәғдәне сығарған Ҡүсем таусыларының да хеҙмәте ҙур икәнлеген онотмағанын күрһәтә.

Таһир Ҡүсимов, ҡарар күҙгә ҡырыҫ күренһә лә, ғәжәп алсаҡ, ябай холоҡло, хатта ғәҙәттәгесә булмаған ғәмәлдәргә лә бара алған кеше ине. Ошо юҫыҡтан бер мәрәкә тураһында әйтеп үтәйем әле.

1968 йылдың мартында Әбйәлилгә «Совет Башҡортостаны» гәзитенең ҡырҡ йыллығына саҡырыу килеп төштө. Ҙур делегация менән барыуын барҙыҡ, тантанаға генерал да килгәйне, байрам бөткәс, ҡайтырға ла кәрәк бит. Әмәлгә ҡаршы, аҡман-тоҡман ҡотора. Поезға билет юҡ. Ҡүсимов ағай, оҙатмаҡҡа, беҙҙе «Волга»һында тимер юл вокзалына алып төштө. Халыҡ, ғәҙәттәгесә, мыжғып тора. Генерал машинанан сығыу менән беҙҙең тирәләй йыйыла башланылар. «Хәрби комендантты минең янға. Тиҙ генә!» — тип бойорҙо был сержант шоферына. Бер нисә минут ваҡыт үтеүгә: «Иптәш генерал, подполковник Соловийчук — һеҙҙең бойороҡ буйынса», — тип олоғайып барған офицер йүгереп килеп тә етте.

— Таныш булығыҙ. Минең яҡташтар. Билет мәсьәләһен йүнләгеҙ, булмаһа, составҡа вагон тағығыҙ. Хуш.

Таһир ағай, фарманын ҡаты биреп, эшенә китте. Хәрби коменданттың хәстәрлеге һәм ҡунаҡсыллығы менән беҙ ҙә иҫән-аман Магнитогорскиға килеп төштөк.

Ҡүсимов, әлбиттә, әлеге изгелеген эшләгән дә онотҡандыр, ундай ғына хәлдәр генералдың ҙур ғүмер юлында бер генә тапҡыр булмағандыр. Беҙгә иһә Таһир ағайҙың ябайлығы һәм егетлеге ныҡ тәьҫир итте.

Үкендереп, йылдар һыу кеүек аға. Ауыр хәрби хеҙмәт, холҡоноң да тынғыһыҙ булыуы баһадир ағайыбыҙҙы ла ҡаҡшатты. Ҡөнитмешебеҙ бер тирәләрәк тура килгәс, генералды күреп йөрөйөм. Тормош иптәшем Сания бала сағын Ҡүсемдә үткәргәс, өҫтәүенә, ул генералдың туғаны, мөғәллимә Фатима Мофаззалова апай ҡулында уҡығас, Таһир ағай уйынлы-ысынлы мине кейәү, ти. Һикһәненсе йылдарҙың баштары ине булһа кәрәк, Таһир ағай менән Әбйәлил районы һабантуйына икәүләп киттек. Магнитогорск аэропортынан генерал, бер ҡайҙа ла һуғылмай, тыуған ауылына юлланды. Һуңғы осорҙа, ҡайта ҡалһа, Таһир ағай кейәүе, фронтовик, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Ғүмәр ағай Ғилмановтарға туҡтар булды. Иртәгәһенә Асҡар эргәһендәге һабантуйға

килдек. Төп ҡунаҡ әйтмешләй, ойошторолған буталыш әбйәлилсә ихлас, матур үтте. Һәммә ғәм генерал артынан эркелеп йөрөй. Ағай иһә, аяҡтарының тәҡәтһеҙ һыҙлауы сәбәпле, оҙаҡлап аяҡ өҫтө тора алмай. Шулай ҙа, аҙ ғына хәл ала ла, йәнә көрәшселәр эргәһенә китә, йә бәйгеселәр эргәһенә ашыға. Бәхеткә, бейек итеп күтәрмә эшләгәндәр. Унан бар һабантуй күҙ алдында. Бәйге башланһа, ағайыбыҙ йәшен дә, сир-ауырыуҙарын да онота. Хатта генераллыҡ олпатлығын да онотҡандай. Күсимов намыҫ һәм егетлекте кешеләге бар сифаттарҙан да өҫкәрәк ҡуйҙы. Ә яҡшы ат... Башҡорт йөрәген елкендергән дә, юҡһындырған да шул бит инде. Генерал-майор Таһир Күсимовты арғымаҡһыҙ күҙ алдына килтереүе мөмкин түгел. Маршал Буденный ватандаштар хәтерендә иң шәп кавалерист булараҡ ҡалһа, генерал Күсимовта башҡорт яугирҙарының йыйылма образын күрәбеҙ.

...Тәбиғәттең төрлө сағы була. Һил генә торған бер мәлдә анау таштарға ҡара болоттар урала башлай. Шыптыр-шыптыр ғына һөйләшеп ултырған сауҡалар, шомланғандай, тымып ҡала. Әллә ҡайҙан килеп сыҡҡан йүгәнһеҙ ел, ҡотороп, күлдәр өҫтөн бер байҡап әйләнә лә, йәнә тау ҡыҫаландарына инеп боҫа. Ә тауҙар күкрәге боронғоса киң, ҡеүәтле. Уларға ваҡыт та, йүгереп үткән ғүмер ҙә хөкөм түгел. Сейәле тау аръяғынан һәр иртә ҡояш асмандағы сәфәренә сыға. Был — тыуған төйәгебеҙ.

Бейек кенә тауға менгән саҡта,
Боролоп ҡына киткән юл булыр.
Аҫыл ғына ерҙәр, матур һыуҙар —
Беҙҙең генә тыуған ил булыр.

Халҡыбыҙҙың ғорурлығы, Советтар Союзы Геройы Таһир Тайып улы Күсимовтың иле ул.

## Елберҙәп тә торған тыу һымаҡ

Германияға утлы өйөрмә ике яҡтан — Рәсәйҙең, Көнсығыш Европаның сикһеҙ киңлектәренән һәм Атлантиканан яҡынайҙы. Көнбайыш, һуғыш осоронда үҙенең туҡлығын һәм именлеген һаҡлап ҡалған немец бюргерҙарының тыныслығын боҙоуҙан ҡурҡҡандай, һүлпән хәрәкәт итте. Американдарҙың, британдарҙың һәм француздарҙың ғәскәрҙәре Арденнда көтөлмәгән мәсхәрәгә тарығандан һуң, күрәләтә утҡа керергә, йәғни немецтарҙың һуғыш тәртиптәренә ҡыҫылырға тырышып барманы. Мәҙәниәтле Көнбайыш, һәр ваҡыттағыса, ҡорбандарға һаран булды һәм самалап эш итте. Уның ҡарауы, көнсығыш фронт ут һәм ҡорос менән гөрһөлдәне. Ул бер генә төҫкә — ҡан төҫөнә буялған ине. Миллионлаған һалдат, меңәрләгән танк һәм самолет, һуғыштың һуңғы сакырымдарында кешеләрҙе күберәк ҡорбан итергә тырышҡандай, өҙлөкһөҙ рәүештә ҡурғаш сәсте. Фронттың ике яғынан да әүҙемлек үҙенең иң юғары нөктәһенә етте.

1945 йылдың апрель уртаһына Гитлерға ҡаршы коалиция буйынса союздаштарҙың ғәскәрҙәре Германия баш ҡалаһынан 100—120 саҡырым алыҫлыҡта торһа, Совет Армияһы алтмыш саҡырым тирәһендә генә ине.

16 апрелдә беҙҙең ғәскәрҙәр, Берлинды алыу һәм фашистик Германияны ҡорал ташларға мәжбүр итеү маҡсатында, хәл иткес стратегик һөжүм башланы. Бөгөн иһә һуғыштар барышы, командованиеның ниәттәре, хәрәкәткә килтерелгән көстәр тураһында төпсөрләп һөйләп тороуҙың кәрәге юҡ. Был — хәрбиҙәр һәм тарихсылар эше. Унан һуң, Бөйөк Ватан һуғышы, шул иҫәптән уның һуңғы этаптары тураһында тау-тау тикшеренеүҙәр, әҙәби әҫәрҙәр яҙылған, меңдәрсә саҡырым таҫмала документаль һәм нәфис фильмдар төшөрөлгән. Һуғыш тураһында, уның панорамалы күренештәренән айырым эпизодтарына ҡәҙәр, барыһы ла — ҙур хәрби начальниктарҙан башлап ябай һуғышсыларға ҡәҙәр, ул тамамланғандан һуң, бөтөн йылдарҙа ла яҙғандарҙыр, моғайын.

Һуғыш дәүләт өсөн дә, һәр кеше өсөн дә — хәҡиҡәт мәле. Әгәр дәүләт билдәле бер сәйәсәтте ҡорал ярҙамында ғәмәлгә ашырһа, окоптарҙа ятҡан һалдат улай итә алмай. Һалдат философ була ала, ләкин бер ҡасан да сәйәсәтсе була алмай. Минең атайым һуғышҡа тиклем уҡытыусы, фронтта элемтәсе булған. Ул 1942 йылда беҙҙең ғәскәрҙәрҙең Харьковҡа уңышһыҙ һөжүме ваҡытында һәләк булған. Бер яҡташым, тулы Дан ордендары кавалеры, пехотасы Вәлиәхмәт Сөләймәнов Венгриялағы Бадачониҙың шарап подвалдарында имән мискәләрҙе автомат пулялары менән селтәрләгән, каскаһына тултырып шарап эскән һәм Будапешттағы Геллерт тауында, Будала Балыҡсылар бастионына һөжүм иткән. Икенсе яҡташым, танкист офицер Йәһүҙә Ибраһимов, беренселәрҙән булып Берлин урамдарына бәреп ингән, ут ямғырынан иҫән ҡалған.

Был һалдаттар, хәрби яҙмыштары төрлөсә булған кешеләр, ижтимағи күренеш булараҡ, сәйәсәт тураһында уйлап та ҡарамаған. Улар, командирҙарының тәжрибәһенә һәм зирәклегенә ышанып, Алла биргән ҡыйыулығы һәм тапҡырлығы менән намыҫлы һуғышҡан.

Немец ғәскәрҙәренең үтә сая ҡаршылыҡ күрһәтеүенә ҡарамаҫтан, Берлин, ике яҡтан да йөҙҙәрсә мең һалдат һәм офицерҙы иҙеп, ниһайәт, бирелде. Әйткәндәй, күп йылдар үткәс, Берлиндың Трептов-паркында, азат итеүсе яугир һәйкәле аҫтындағы бинала, Германия баш ҡалаһында һәләк булған совет һалдаттарының фамилиялары яҙылған ғәйәт ҙур фолиантты (ҡалын китап) күрергә тура килде. Улдарын юғалтҡан Тыуған илдең ҡайғыһы сикһеҙ булған кеүек, был исемлектең дә осо-ҡырыйы юҡ.

1981 йылдың июнь башы. Германияла иҫ киткес гүзәл ваҡыт. Берлин урамдарында, утыҙ алты йыл әүәлге кеүек үк, беҙҙең һалдаттар йөрөй. Беҙ Берлинды көнсығыш һәм көнбайыш өлөштәргә айырып торған демаркация һыҙығына табан йүнәлдек. Унда, матур итеп йыйыштырылған майҙанда, йүкә аллеяһы аша, Германияла фашизм хакимлығы билдәһе булған рейхстаг күренә. Сәйер, әммә Трептов-парктан һуң рейхстагты күргәс, мин немецтарҙың ҡайғыһына ҡыуаныу ҙа, атайҙарыбыҙҙың еңеүенә шатлыҡ тойғоһо ла кисермәнем. Ниндәйҙер ҡаушап ҡалыу һәм уҙған һуғыштың ғәйәт ҙур мәғәнәһеҙлек булыуын ғына тойҙом.

Рейхстагты алыу һәм уның өҫтөнә Ҡыҙыл байраҡ ҡаҙау, илдең сәйәси етәкселәре фекеренсә, Бөйөк Ватан һуғышында тамам еңеү билдәһе булырға тейеш, һәм командование ихтыяры менән Берлин үҙәгенә йүнәлтелгән кешеләр, генералдан алып ябай яугирға тиклем, нәҡ шуға әҙерләнгән.

Һуғыштың ошо күренешенә арналған материалдар менән танышҡанда дәлилдәр, версиялар, фаразлауҙар аша үтеүҙең нисек ауыр булыуын белдем. Был бәхәскә кешеләр күберәк йәлеп ителгән һайын, тарих, яңынан-яңы легендалар менән байытылып, буталсыҡлана ғына барҙы.

Тарихсылар алты томлыҡ «1941—1945 йылдарҙағы Советтар Союзының Бөйөк Ватан һуғышы тарихы»ның бишенсе томын яҙғанда рейхстагты штурмлауҙы айырыуса етди өйрәнгән. КПСС Үҙәк Комитеты ҡарамағындағы Марксизм-ленинизм институты 1960 йылдың 8 апрелендә «түңәрәк өҫтәл» ойошторған. Уның эшендә Советтар Союзы Геройҙары — 79-сы уҡсылар корпусы командиры С.Переверткин, 150-се уҡсылар дивизияһы командиры В.Шатилов, 756-сы полк командиры Ф.Зинченко һәм башҡалар ҡатнашҡан. «Түңәрәк өҫтәл» материалдары рейхстагты штурмлау тураһында текст яҙыу өсөн файҙаланылған. Ул 1961 йылдың 15—16 ноябрендәге кәңәшмәлә тикшереләнеү темаһы булған. Был юлы рейхстагты штурмлауҙа ҡатнашыусылар даирәһе шаҡтай киңәйтелгән.

Материалды тикшереүҙә 1-се Белоруссия фронты Хәрби советы ағзаһы Ҡ.Телегин, 3-сө удар армия командующийы В.Кузнецов, армияның сәйәси бүлек

начальнигы Ф.Лисицын, дивизия командирҙары В.Шатилов һәм А.Негода, полк командирҙары А.Плеходанов, Ф.Зинченко һәм В.Шаталин, батальон командирҙары С.Неустроев һәм Қ.Самсонов, рота командиры И.Сьянов, штурмлау төркөмдәре командирҙары В.Маков, М.Бондарь һәм башҡалар ҡатнашҡан.

Рейхстаг өҫтөнә байраҡ күтәреүҙә туранан-тура ҡатнашҡан А.Берестың, А.Лисименконың, М.Мининдың сығыштары айырыуса ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырған.

Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар шундай һығымтаға килгән ки, ул хәҡиҡәткә яҡын торһа ла, һуңғы фекер булыуға дәғүә итә алмаған.

Профессор Г.А.Қуманев, рейхстаг өҫтөнә байраҡ күтәреү ваҡыты йәһәтенән ниндәй һығымта яһарға мөмкин, тигән һорауға яуап биреп, былай ти:

— Рейхстаг өҫтөнә ҡыҙыл флагтар күп нығытылған, берәүҙәре — иртәрәк, икенселәре — бер нисә минутҡа һуңыраҡ, ә өсөнсөләре — һуғыш бөткәндән һуң, рейхстагты союздаш ғәскәрҙәргә тапшырғанға тиклем... Һәм был законлы күренеш. Уларҙың һәммәһе лә совет яугирҙары тарафынан бөтөн совет халҡы исеменән беркетелгән.

Әммә хәҙер һүҙ рейхстаг өҫтөндәге тәүге ҡыҙыл әләмдәр, йәғни байраҡтар тураһында бара. Мәҫәлән, 79-сы уҡсылар корпусы штабы тарафынан тапшырылған ҡыҙыл байраҡты капитан В.Маковтың артиллерист-разведчиктары өлкән сержанттар Ғ.Заһитов, А.Лисименко, сержант А.Бобров һәм батарея парторгы сержант М.Минин составындағы штурмлау төркөмө яугирҙары рейхстаг түбәһенә («Еңеү алиһәһе» скульптура һынына) беренселәр булып ҡаҙаған. Ҡыҙыл байраҡлы 4-се артиллерия корпусы командиры, артиллерия генерал-лейтенанты Игнатовтың 1-се Белоруссия фронты артиллерияһы командующийына хәбәр итеүенә ҡарағанда, байраҡ капитан В.Н.Маков төркөмө тарафынан 1945 йылдың 30 апрелендә, егерме ике сәғәт ҡырҡ минутта эленгән.

Ике-өс сәғәттән һуң, беренсе майға ҡаршы төндә, рейхстаг түбәһенә 3-сө удар армия Хәрби советы байрағы беркетелгән. Ф.Зинченконың туранан-тура бойороғонан һуң уны 756-сы полк разведчиктары М.Егоров менән М.Қантария беркеткән. Уларҙы Неустроевтың сәйәси бүлек буйынса урынбаҫары лейтенант А.Берест һәм И.Сьянов ротаһынан автоматсылар төркөмө оҙатып барған. Егоровтың һәм Қантарияның күһәтеүенсә, улар үҙҙәренең байрағын атлы рыцарь-кайзер Вильгельмдың депутаттар бинаһының көнсығыш яғында торған скульптураһына беркеткән. Улар һуңыраҡ — 2 майҙа — рейхстаг көмбәҙенә күсергән 5-се ҡыҙыл байраҡ Бөйөк Ватан һуғышында совет халҡының Еңеү байрағы тип иҫәпләнә башлаған.

3 майҙа 14 сәғәттә корпус командиры Переверткин 3-сө удар армияның Хәрби советына былай тип хәбәр иткән: «1945 йылдың 30 апрелендә 150-се уҡсылар дивизияһы тарафынан рейхстаг бинаһы өҫтөндә беркетелгән ҡыҙыл байраҡ минең шәхси бойороғом буйынса хәҙер кире алынды. Байраҡ урынына мин ҙур алһыу әләм ҡуйырға бойороҡ бирҙем». Артабан ул рейхстаг көмбәҙенән алынған байраҡты, фронттан, армиянан һәм корпустан делегация менән бергә, Кремлгә, Юғары Башкомандующийға ебәреүҙе үтенгән.

Армия Хәрби советының яуабы табылманы. Ул булмағандыр ҙа. Ләкин, мәғлүм булыуынса, байраҡ көмбәҙҙән алынғандан һуң, унда бөгөнгө көндә билдәле яҙма ҡалдырылған. 20 июндә, көндөң икенсе яртыһында, байраҡты Мәскәүҙең Үҙәк аэродромына килтергәндәр. Әммә был байраҡты парадҡа сығармаҫҡа ҡарар ителгән. Генераль репетициянан һуң уҡ Еңеү байрағын СССР Ҡораллы Көстәренең Үҙәк музейына оҙатҡандар һәм ул, миллиондарҙың ҡаны менән һуғарылған изге иҫтәлек булараҡ, унда бөгөн дә һаҡлана.

1999 йылда Ҡазанда «Татинформ» агентлығы журналисы Йәғсүф Шафиҡовтың «Быуат аҙағында 17 әңгәмә» тигән китабы донъя күрҙе. Китаптың «Һуғыш шулай тамамлана» тигән бүлегендә (ул «Республика Татарстан» гәзитендә лә баҫылып сыға) рейхстагтың тәүге совет коменданты С.А.Неустроев менән әңгәмә урынлаштырылған.

«Һуғыш батыры ябай ғына көн күрә. Дөрөҫөрәге — фәҡирлектә. Степан Андреевич һуңғы йылдарҙа йыш ауырый.

Һуғыш батырынан Берлин өсөн, унан һуң гитлерсыларҙың ҡала эсендәге нығытмаһы өсөн алыш тураһында һөйләгәндәрен тыңлағандан һуң, мин әңгәмәсемдән туранан-тура шуны һорай ҡуйҙым:

— Шулай ҙа Еңеү байрағын рейхстаг өҫтөнә кем ҡаҙаған һуң?

— Капитан Маковтың өлкән сержанттар Ғ.Заһитов, М.Минин, А.Бобров һәм А.Лисименко составындағы төркөмө, — тип айырып әйтте элекке комбат. — Был хәл 1945 йылдың 30 апрелендә 22 сәғәт 40 минутта булды. Был хаҡта еңеүле ҡырҡ бишенсе йылдан бирле һөйләйем бит инде.

— Сержанттар М.Егоров менән М.Ҡантария нисек һуң?

— Сержанттар М.Егоров менән М.Ҡантария штурмдан һуң бер нисә сәғәт үткәс, дөрөҫөрәге 1945 йылдың 1 майында, төнгө өстәр тирәһендә, рейхстагҡа килтерелгәндәр. Мин уларҙы батыр совет яугирҙары булараҡ бик ихтирам итәм. Ләкин Егоров менән Ҡантария һөжүмдә ҡатнашманы, рейхстагты алманы, ә батальондың бөтөн даны уларға эләкте, тип ҡәтғи рәүештә әйтергә тейешмен. Был сержанттар үҙҙәре лә һуғыштан һуңғы йылдарҙа рейхстаг өҫтөнә Еңеү байрағын беренселәрҙән булып беркетмәүҙәре тураһында һәр ваҡыт һөйләне.

Еңеү байрағын беркетеү менән генә һуғыш тамамланманы. 1 май иртәһендә иртәнге аш килтерҙеләр. Тик ашап өлгөрмәнеләр: немецтар, байраҡты күреп, һөжүм башланы, ахыры.

Бары тик икенсе майҙа ғына рейхстагта алыш тамамланды, немецтар аҡ флаг ташланы».

Й.Шафиҡовтың юғарыла әйтелгән китабында 136-сы артиллерия бригадаһының элекке дивизион командиры Н.Д.Ивановтың иҫтәлектәре баҫылған. Улар 1998 йылдың ғинуарында яҙылған тип күрһәтелгән. Автор, атап әйткәндә, былай тип хәтерләй:

«1945 йылдың 26 апрелендә, рейхстагты алыу ваҡыты еткәс, 3-сө удар армияның хәрби советы штурмлау өсөн үҙ ихтыяры менән һайланған боевой төркөмдәр ойоштороорға саҡырып, личный составҡа мөрәжәғәт итте. Теләүселәр араһынан иң ҡыйыу һәм тәжрибәле яугирҙарҙы һайлап алдылар.

Шулай итеп, һәр дивизия һәм 3-сө армияның артиллерия командующийы үҙҙәренең штурмлау төркөмдәрен ойошторҙо. 3-сө удар армияның артиллерия командующийы төркөмө составына 832-се айырым разведка артиллерия дивизионының яугирҙар төркөмө инде. Мин улар менән яраланғанға ҡәҙәр командалыҡ иткәйнем. Хәҙер иһә капитан В.Н.Маков етәкселек итте. Был төркөм рейхстагты штурмлау көндәрендә капитан Неустроев етәкселегендәге беренсе батальон составында ине.

Әйтеп китеүемсә, капитан В.Н.Маков төркөмөнә элекке һуғыштарҙа айырыуса батырлыҡ күрһәткән өлкән сержанттар Ғ.Заһитов, М.Минин, А.Бобров, А.Лисименко ингәйне.

Штурмлаусы һәр төркөмгә ҡыҙыл туҡыма — Еңеү байрағы тапшырылды. 3-сө удар армияның Хәрби советы мөрәжәғәтендә: «Рейхстаг өҫтөнә Ҡыҙыл байраҡты беренсе булып беркеткән кешеләрҙең барыһына ла Советтар Союзы Геройы исеме биреләсәк», — тип әйтелгәйне.

79-сы уҡсылар корпусы командирының бойороғо буйынса, 1945 йылдың 30 апрелендә, 21 сәғәт 30 минутта, рейхстагты хәл иткес штурмлауға әҙерлек

башланды. Ҡапитан С.А.Неустроев батальоны рейхстагтың алғы ишегенә табан бара башлағас, Ғ.Заһитов, М.Минин, А.Бобров, А.Лисименко, капитан В.Маков етәкселегендәге төп көстәрҙе көтөп тормайынса, шунда уҡ инеү юлына ташланды. Рейхстагҡа яҡынлашҡас та, ҡыйыу яугирҙар автоматтан ут асты, бер секундҡа ла туҡталып тормайынса, киң гранит баҫҡыс буйлап күтәрелә башланы. Алда бикле бик ҙур ишек бар ине. Уның янында бер взвод һалдат йыйылған. Шулай итеп, аҙ ғына тотҡарлыҡ килеп сыҡты...

Заһитов менән Лисименко бер бүрәнә табып алды ла бүтәндәр ярҙамында ишекте емерә төрттө.

Ҡапитан Маковтың командаһы буйынса, штурмлаусылар төркөмө, гранаталар һәм автомат уттары менән үҙҙәренә юл ярып, алға ынтылды, ә түбәндән уҡсылар подразделениелары һалдаттары уларға ярҙам итте. Сарҙаҡҡа менеп еткәс, бер металл көпшә (байраҡ өсөн һап) табып алып, йыуан сылбыр буйлап үрмәләп рейхстаг түбәһенә күтәрелделәр. Шунда, артиллерия утына ҡарамаҫтан, өлкән сержанттар Ғәзетдин Заһитов менән Михаил Минин беренсе Ҡыҙыл байраҡты беркетте. Минин түбәлә үк байраҡҡа дүрт иптәшенең фамилияларын яҙып ҡуйҙы. Заһитов, үҙенең ҡулъяулығын таҫма итеп йыртҡыслап, байраҡтың ике осон нығытты.

Скульптурала ҡапшап бер тишек таптыҡ та, шунда байраҡты ҡаҙаныҡ. Йығылмаһын өсөн байраҡтың көпшәһен «Еңеү алиһәһе» скульптураһының тажына бәйләнек.

1945 йылдың 1 майында 136-сы артиллерия бригадаһы командованиеһы өлкән сержанттар Ғ.Заһитовҡа, М.Мининға, А.Бобровҡа, А.Лисименкоға һәм капитан В.Маковҡа Советтар Союзы Геройы исеме биреүҙе юллап документтар әҙерләй. 2, 3, 6 майҙа 79-сы уҡсылар корпусы командиры, артиллерия (3-сө удар армия) командующийы, яугирҙарҙың был төркөмөнә Советтар Союзы Геройы исеме биреү тураһындағы юллауҙы яҙма рәүештә раҫлай.

Әммә артабан тарихтың күңелһеҙ (хатта хурлыҡлы) өлөшө башлана...

В.Маков төркөмөнөң батырлығы онотола... Рейхстаг өҫтөнә Еңеү байрағын беренселәрҙән булып күтәргән һәм Бөйөк Ватан һуғышына еңеүле һуңғы нөктәне ҡуйған ысын батырҙар тураһындағы хәҡиҡәтте оялып ҡына йәшерәләр...

136-сы артиллерия бригадаһының ветерандар советы хәҡиҡәтте һәм ғәҙеллекте тергеҙеү өсөн даими рәүештә көрәш алып барҙы.

Һикһәненсе йылдар аҙағында һәм туҡһанынсы йылдар башында беҙгә, һуғыш ветерандарына, ғәҙеллекте тергеҙеүҙә ҡайһы бер нәмәгә өлгәшеү мөмкин булды.

Ҡораллы Көстәрҙең Үҙәк музейындағы Еңеү залында, Еңеү байрағы менән рәттән, нәҡ бына ошо төркөм рейхстаг өҫтөнә беренсе булып күтәрелгән өлкән сержанттар Ғ.Заһитов, М.Минин, А.Бобров һәм А.Лисименконың портреттарынан экспозиция яһағандар.

В.Маков төркөмөнөң өҫтөнлөгө әлеге ваҡытта Поклонная тауындағы мемориаль музей тарафынан да танылды.

Хәрби энциклопедияның һуңғы баҫмаһында «Еңеү байрағы» тигән мәҡәләлә, рейхстаг өҫтөнә Еңеү байрағын беренсе булып В.Маков төркөмө ҡаҙаны, тип рәсми рәүештә таныла һәм унда аҡҡа ҡара менән шулай тип яҙылған. Хәҙер Хәрби энциклопедияға мөрәжәғәт итәйек (1995 йылғы баҫма, 3-сө том, 292-се бит), «Еңеү байрағы» тигән мәҡәләлә, айырым алғанда, былай тиелә:

«1945 йылдың 1 майына ҡаршы төндә совет яугирҙары Берлиндағы рейхстаг бинаһы өҫтөнә ҡаҙаған Ҡыҙыл байраҡ 1941—1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында совет халҡының еңеүе билдәһе булып тора.

Рейхстагҡа һөжүм ваҡытында унда ҡыҙыл байраҡтар күтәреү буйынса бурысты үтәгән өсөн һалдаттар һәм офицерҙарҙың ҙур төркөмө, шул иҫәптән

Берест, Бобров, Егоров, Заһитов, Ҡантария, Лисименко, Маков һәм Минин Ҡыҙыл Байраҡ ордендары менән бүләкләнә. Еңеү көнөнөң бер йыллығына Егоров, Ҡантария, алдынғы батальондар командирҙары капитандар Неустроев, Давыдов һәм өлкән лейтенант Самсонов, шулай уҡ өлкән сержант Сьянов Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була».

Артабан рейхстагтың тәүге коменданты С.А.Неустроевтың фекерҙәрен килтерәбеҙ:

— ...Мин Гитлер хәрби машинаһының ояһын алыу өсөн барған тарихи алышта теге йәки был һалдаттың, офицерҙың ролен һис кенә лә кесерәйтеп күрһәтергә теләмәйем. Уларҙың һәр ҡайһыһы — ҡаһарман. Шуға күрә рейхстаг өҫтөнә беренселәрҙән булып Еңеү байрағын ҡаҙаған һәм бының өсөн Советтар Союзы Геройы исемен алған яугирҙар булараҡ Бөйөк Ватан һуғышы тарихына инеп киткән грузин Мелитон Ҡантарияны һәм рус Михаил Егоровты нимә өсөн дә булһа ғәйепләргә теләмәйем, тип ысын күңелдән әйтәм. Шулай ҙа ул көндәрҙәге ваҡиғаларҙы хәтергә алғанда, ҡайһы бер командирҙарҙың тарихи факттарҙы күрәләтә ялған итеп күрһәтеүгә барып етеүе беҙҙең Рәсәйгә хас буталсылыҡтан һәм яуапһыҙлыҡтан башҡа мөмкин түгел.

Журналист Й.Шафиҡовтың М.Мининға һорауы:

— Михаил Петрович, рейхстагты алыу тураһында һөйләһәгеҙ ине.

— Ғәзетдин Заһитов менән мин 1942 йылдың май урталарында, агитаторҙар семинарында, осраштым. Ҡарап торғанда ул башҡа һалдаттарҙан һис айырылмай. Зәңгәр күҙле, уртаса буйлы, киң яурынлы. Сәстәре ҡыҫҡа, шырт, сөм ҡара. Яңаҡтары һәм танауы, бала сағында кисергән сәсәк ауырыуынандыр, шаҙра булып ҡалған.

Заһитов һуғышҡа медицина техникумының өсөнсө курсынан алынған. Техникумда алған белеме фронт шарттарында кәрәге тейә. Ул яралыларға йыш ҡына тәүге ярҙамды күрһәтә, үҙ ғүмерен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып, уларҙы ҡотҡара. Иптәштәре, шаяртып, уны «лейб-гвардия табибы» тип йөрөтә. Ул бер ҡасан да үпкәләмәй. Үҙе лә мәрәкәләргә ярата.

30 апрелдә, теүәл 21 сәғәт 30 минутта, артиллерия әҙерлеге башлана. Ул тамамланыуға биш минут ҡала тигәндә Бобров, Заһитов, Лисименко һәм мин, мөйөштәге тәҙрәнән һикереп сыҡтыҡ та, каналға табан ынтылдыҡ. Заһитов беҙҙе алдан билдәләнгән кисеү урынына һис яңылышыуһыҙ килтереп еткерҙе.

Артиллерия һәм минометтар уты Тиргартен паркына күскәс (был 22 сәғәттә ине), һөжүмде башлау тураһында сигнал булып бер-бер артлы йәшел ракеталар осто. Был ваҡытҡа беҙ каналдың икенсе яҡ ярында инек инде. Төп көстәрҙең килеп етеүен көтөп тормай, алғы ҙур ишеккә табан ынтылдыҡ. Был маршрутты Заһитов көндөҙ үк бинокль аша яҡшылап өйрәнгәйне.

Рейхстагҡа яҡынлашыу менән автоматтан ут астыҡ һәм, бер секундҡа ла туҡтап тормай, гранит баҫҡыс буйлап өҫкә йүгерҙек.

Дошмандың ҡаушап ҡалыуынан һәм алыштың беренсе минуттарында ирешкән уңыштан файҙаланып, беҙҙең командир рейхстаг түбәһенә күтәрелергә ҡарар итте. Тотош шау-шыу, автоматтан атыу һәм гранаталар шартлауы араһында беҙ капитандың: «Минин, барыһын да йый ҙа флаг менән — юғарыға!» — тигән командаһын ишеттек.

Минең менән бергә — Заһитов, Бобров, Лисименко. Бүтән частарҙағы һуғышсылар ярҙамға килгәндә беҙ икенсе ҡатта инек инде.

Тиҙҙән, өҫтәмә көс менән, капитан Маков та килеп етте. Ҡомандир, нығ шатланып, беҙҙең һәр ҡайһыбыҙҙы ҡосаҡлап үпте. Артабан: «Иптәш генерал, минең егеттәр рейхстаг түбәһенә беренсе булып Еңеү байрағын ҡаҙаны», —

тип, шатлығын йәшерә алмайынса, корпус командиры С.Н.Переверткинға хәбәр итте.

Леша Бобров байраҡты юғарыраҡ күтәрергә маташҡан арала мин, ҡәләм остоғо табып, Ҡыҙыл байраҡты беренсе булып нығытыусыларҙың фамилияларын: Бобров, Заһитов, Лисименко һәм Минин тип әләмгә яҙып ҡуйҙым. Тиҙҙән Леша өс метрлы баҫҡыс алып килде, уның буйлап мин өҫкә табан тағы ла ике метрға күтәрелдем, байраҡтың бер осон ағас киҫәгенә ураным һәм уны ҙур кирбес менән нығытып та ҡуйҙым.

Артиллеристарҙың (ул саҡта беҙҙең төркөмдө шулай тип йөрөтәләр ине) Ҡыҙыл байраҡты ҡаҙауы тураһындағы хәбәр рейхстагҡа һөжүм алып барыусы бүтән яугирҙарға тиҙ үк барып етте, уларҙа патриотик рух күтәренкелеге тыуҙырҙы. Тиҙҙән Ғәзетдин Заһитов ҡаты яраланды. Пуля уның күкрәгендәге «Батырлыҡ өсөн» медален, партия билетын тишеп, йөрәгенән бер сантиметр арала ғына үткән булып сыҡты, әммә, медицина ярҙамы алғас, Заһитов полк санчасына барыуҙан ҡәтғи баш тартты. Яралы булһа ла, Еңеү байрағын һаҡлау өсөн сарҙаҡҡа өс тапҡыр күтәрелде.

Еңеү байрағына барыу урынын беҙ 1945 йылдың 1 майына, иртәнге сәғәт бишкә тиклем, сиратлашып һаҡланыҡ.

1945 йылдың 1 майының төнөндә сәғәт өсөнсө киткәс, Лисименко һәм мин капитан Маков менән сираттағы бәйләнешкә инеү өсөн түбәнгә төштөк. Шунда ҙур ишектән бинаға яңы байраҡ алып инеүҙәрен күрҙек. Алдан күн ҡыҫҡа куртка кейгән лейтенант А.Берест, уның артынан М.Егоров, М.Ҡантария һәм ике автоматсы килә ине. Улар төрөп тотолған байраҡ менән тантана залына, эскә табан үтте. Артынан ни булыуы миңә мәғлүм түгел, әммә 1945 йылдың 1 майында иртәнге сәғәт бишкә тиклем, М.Егоровтың һәм М.Ҡантарияның рейхстаг түбәһендәге скульптуралар төркөмө янында һәм беҙ һаҡлауҙа тотҡан баҫҡыста булмауҙарын бик яҡшы беләм.

Ғәзетдин Заһитовтың яугир иптәштәренең дәлилдәренә һәм документтарға өҫтәп нимә әйтергә була һуң? Өҫтәрлек бер нәмә лә юҡтыр, моғайын. Алдымда төрлө йылдарҙа һәм төрлө авторҙар яҙып сыҡҡан бик күп мәҡәләләр ята. Әммә уларҙың барыһын да бер нәмә — иҫбат ителгән ғәҙеллектең, хәҡиҡәттең, ниһайәт, тантана итергә тейешлегенә инаныу берләштерә. Ысын батырлыҡты күрмәй, ялған ҡаһарманлыҡты юғарыға күтәреүҙең Рәсәйҙә борон-борондан килгән традицияһын емерергә кәрәк.

Ахырҙа ни әйтергә? Рейхстагҡа һөжүм итеүсе батырҙың һәм, ғөмүмән, Бөйөк Ватан һуғышы ҡаһарманының артабанғы яҙмышы нисек булған? Уҡыусылар, бәлки, хәтерләйҙер, Еңеүҙән һуң бер нисә тиҫтә йыл буйына совет матбуғатында һуғыш тураһында аҙ яҙылды. Фронтовиктарҙы бик һирәк иҫкә ала һәм хөрмәтләйҙәр ине. Әммә был Ғәзетдин Ҡазыхан улы Заһитовты тыуған ерендә белмәгәндәр тигәнде аңлатмай. Әйҙәгеҙ, журналист Йәғсүф Шафиҡовҡа һүҙ бирәйек.

«Яҡташыбыҙ Ғ.Заһитовтың фамилияһы матбуғатта 1962 йылда беренсе тапҡыр күренеп ҡалды. Мин, кем һуң ул Заһитов, тип оҙаҡ баш ваттым. 80-се йылдар аҙағында ғына уның яҡташым тиерлек булыуын асыҡлай алдым. Мин Ағиҙелдең һул яғында, Аҡтаныш районында, ә Ғәзетдин Заһитов Ағиҙелдең уң яғында, беҙҙең ауылдан йөҙ саҡырымдар тирәһендә, тыуған».

1997 йылдың ноябрь аҙағында Өфөлә Башҡортостандың тәүге Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов менән осрашҡанда мин һуғыш батырының тыуған ауылында булыу теләген әйттем, һәм икенсе көндө «Волга» автомашинаһы мине Өфөнән 160 саҡырымда ятҡан, боронғо Бөрө ҡалаһынан алыҫ булмаған Янағош тигән ауылға алып килде.

Ауыл музейында ошо мәҙәниәт усағының етәксеһе, пенсиялағы уҡытыусы Ғәлимйән Вилдан улы Бикбулатов беҙгә ауылдың тарихы һәм яҡташтарының бөгөнгө тормошо һәм батырлығына арналған материалдарҙы күрһәтте. Унан һуң зыяратҡа юлланабыҙ. Янағош ауылы кешеләренең һуңғы «төп төйәге» бик бөхтә һаҡлап тотола. Зыярат уртаһында һуғыш ҡаһарманына һәйкәл ҡуйылған. Аҡ мәрмәр стеллаға: «Бында Ғәзетдин Ҡазыхан улы Заһитов ерләнгән, 1921—1953 йылдар. Берлинды алыуҙа ҡатнашҡан, рейхстагҡа беренселәрҙән булып Ҡыҙыл байраҡ ҡаҙаған батырҙы мәңге онотмайыҡ», — тип яҙылған.

Ғәзетдин Янағошта дүрт синыфты, унан һуң күрше Уръяҙы ауылында ете йыллыҡ мәктәпте тамамлай һәм 1933 йылда Бөрө медицина техникумына уҡырға инә. 1940 йылда уны Ҡыҙыл Армияға хеҙмәткә саҡыралар. Шулай итеп, ул Таллинға барып сыға, унда кесе офицерҙар курсын тамамлай. Һуғыш башланғанда ул Эстонияла була. Һуңынан майор Николай Дмитриевич Иванов етәкселегендәге 83-сө айырым разведкалау артиллерия дивизионы сафтарында фашистарға ҡаршы көрәшеүен дауам итә. Заһитовтың артабанғы фронт яҙмышын беләһегеҙ инде.

1945 йылдың йәйендә Ғәзетдин ялға ҡайта. Бер айға яҡын әсәһе янында йәшәй һәм ҡаты яраланыуы, рейхстаг өсөн көрәштәрҙә батырлыҡ күрһәтеүе тураһында бер һүҙ ҙә әйтмәй. Ул шундай тыйнаҡ, итәғәтле була. 1946 йылдың 1 июлендә Заһитов, демобилизацияланып, бөтөнләй ҡайта. Тәүҙә ябай колхозсы булып эшләй. Унан һуң ауыл Советы рәйесе итеп һайлайҙар. Шул уҡ йылды күрше ауылдан Ҡәмилә исемле ҡыҙға өйләнә. Бөтөн ауыл менән туй яһайҙар.

Тиҙҙән Ҡамай МТС-ына механик булып күсә.

1953 йылдың авгусында Заһитов йөк машинаһы менән Өфөгә ауыл хужалығы техникаһына запас частар алырға бара һәм автомобиль һәләкәтенә эләгә.

— Әлеге ваҡытта уның ҡәрҙәштәренән кем дә булһа иҫәнме?

— Янағошта уның бер туған Хөсникамал апаһы йәшәй. Ҡуптән түгел уға 80 йәш тулды. Ғәзетдиндың ҡыҙы Нәжиә Благовещен районының Әшмәнкә ауылында йәшәй. Ете ул тәрбиәләп үҫтергән. Батырҙың улы Ғәззәли Өфөлә, уның ҡыҙы, улы, ике ейәне бар.

— Ғәлимйән ағай, үҙегеҙ Ғәзетдин Заһитов менән осраша алдығыҙмы?

— Ул фронттан ҡайтҡанда миңә 18 йәш ине инде. Ул өйләнмәгән, мин дә буйҙаҡ. Икәүләшеп егет булып йөрөнөк. Ул һүҙгә әүәҫ булманы. Фронт хәлдәре тураһында һөйләргә яратмай ине. Ләкин бер ваҡыт ул былай тине: «Бына йылдар үтер. Беҙҙең хаҡта ла, нисек һуғышҡандарыбыҙ тураһында һөйләрҙәр әле...» — тине. Ул саҡта уның рейхстаг өҫтөнә беренсе булып байраҡ ҡаҙауы тураһында уйлап та ҡарамағанбыҙ. Беҙ Егоров менән Кантарияны ғына белдек һәм, Ғәзетдин һәләк булғас, алтмышынсы йылдарҙа ғына, матбуғаттан дөрөҫлөктө белә башланыҡ.

Эйе, беҙ бер нәмәне онотоп ебәрәбеҙ: Бөйөк Ватан һуғышы яугирҙары бүләктәр һәм исемдәр яулау өсөн түгел, ә Тыуған илде һаҡлау хаҡына үҙ ғүмерен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйған. Ғәзетдин Заһитовтың батырлыҡтары тураһында бер тапҡыр ҙа һөйләмәүе ошо хәҡиҡәтте раҫлай түгелме һуң?

Бөйөк Еңеүҙең түңәрәк даталары бер-бер артлы үтә тора. Үтеп киткән тиҫтәләрсә йылдарҙа донъя танымаҫлыҡ булып үҙгәрә. Социалистик илдәр лагеры, Варшава Договоры онотолоп килә инде. Ике Германия бер дәүләт булып йәшәй. Рейхстаг та яңыртып ҡоролған, үҙгәртелгән... Ләкин батырлыҡ ҡына үҙгәрешһеҙ ҡала һәм тышҡы факторҙар ҙа, эске хәл-шарттар ҙа уның асылына йоғонто яһай алмай.

Ҡаһарман ике яугир тураһында әйтер һүҙем шул ине. Ғ.Заһитов тураһындағы яҙмаларҙың бер өлөшө 2005 йылда «Родина» журналында баҫылды.